7 класс

Диагностик диктант 11.09.23

НЕФТЬ.

Ерҙең төрлө ҡатламдарында нефть бынан күп йылдар элек барлыҡҡа килгән. Һуңынан ул ер ярыҡтарынан һәм йомшаҡ тупраҡ аша ер өҫтөнә һарҡып сыҡҡан. Шулай нефть күләүектәре, нефть күлдәре хасил булған.

Күп урында нефть менән бергә газ да сыҡҡан. Унда газ тоҡанып киткән һәм оҙаҡ ваҡыттар янып торған.

Кешеләр был һүнмәҫ уттарҙың серенә төшөнә алмағандар һәм уларға табына торған булғандар. Шулай ҙа кешеләр нефтте көндәлек тормошта ла, хәрби маҡсаттарҙа ла файҙаланғандар. Сыңғыҙ хан ғәскәрҙәре Бохара ҡәлғәһенә нефть тултырылған көршәктәр ырғытҡандар, нефтле сүскә ут тоҡандырып ташлағандар.

Хәҙер беҙҙең илдә нефть сәнәғәте бик алға китте. Бында Башҡортостандың өлөшө лә бик ҙур. *(Д. Бураҡаевтан.)*

Эш. Яңғыҙлыҡ исемдәрҙең аҫтына һыҙырға, һуңғы һөйләмдең һүҙҙәренә морфологик анализ яһарға.

Контроль диктанттар

I. ҠЫШЛАУСЫ ҠОШТАР.

Ҡыш. Бөтә ерҙә ап-аҡ ҡар һырынтылары. Урман тып-тын, ул уйға сумған төҫлө. Ҡар аҫтында һығылған ағастар әкиәттәге кеүек булып ҡалғандар.

Ғинуар беҙҙең яҡта бик ҡаты була, һалҡындар хатта 40 градустан да уҙып киткеләй. Ыжғыр буранлы көндәр күп. Ел һыҙғыра, олой, ҡоторона, ләкин ул ҡапыл туҡтай. Һыуыҡ йомшара, тағы ла тынлыҡ урынлаша.

Тәжрибәле натуралист һәр саҡ ҡарҙа ҡышҡы йән эйәләренең эҙҙәрен таба. Бына ҡар өҫтөндә дегәнәк баштары туҙҙырылған, бында ҡарабаш турғайҙар ем эҙләгән.

Сел, һуйыр, ҡор кеүек ҡоштар сатлама һыуыҡтар үткәнен тәрән ҡар эсендә көтәләр. Тик һайыҫҡан, ҡарға, турғайҙар ғына көслө һыуыҡтарға бирешмәйҙәр, улар кеше йәшәгән урындарға яҡынырaҡ киләләр. Сөнки бында аҙыҡ табыуы еңелерәк уларға. Поляр өкөһө төньяҡта йәшәй, ә ҡышын беҙгә күсеп килә.

Башҡортостанда 70-тән артыҡ ҡош ҡышлай. Һеҙҙә ниндәй ҡоштар ҡышлай? Уларға һеҙ нисек ярҙам итәһегеҙ? *(«Совет Башҡортостаны».)*

159-сы бит
Дикт. йыйынт